Раҫлайым:
“Сулпылар” балалар баҡсаһы мөдире

----------------------  Н.А. Биушкина

# “Иң якшы театр мөйөшө” темаһына төркөм – ара конкурс ПОЛОЖЕНИЕҺЫ

**1. Дөйөм положениелар**

Положение “Сулпылар” балалар баҡсаһында үткәреләсәк “Иң яҡшы театр мөйөшө” конкурсы тәртибен билдәләй һәм балалар баҡсаһы мөдире тарафынан раҫлана.

**2. Конкурс маҡсаты:** Театр эшмәкәрлегендә баланың ижади әүҙемлеген үҫтереү өсөн оптималь шарттар булдырыу.

**3. Конкурс бурыстары:**

3.1. Театр эшмәкәрлегендә баланың ижади әүҙемлеген үҫтереү өсөн шарттар булдырыуҙа педагогтарҙың компетентлығын күтәреү.

3.2. Педагогтар араһында театр эшмәкәрлеген ойоштороуҙа ижади эҙләнеүҙәргә булышлыҡ итеү.

3.3. Төркөмдәрҙә предметлы – арауыҡлы үҫеш мөхитен тулыландырыу.

3.4. Ата – әсәләр менән хеҙмәттәшлекте дауам итеү.

**4.Конкурста ҡатнашыусылар:**

Конкурста бөтә төркөм тәрбиәселәре һәм ата – әсәләр ҡатнаша.

**5. Конкурс үткәреү ваҡыты**: 28.03. 2017 - 31.03. 2017.

**6. Конкурс комиссияһы составы:**

*Конкурс рәйесе:*

Биушкина Нурия Әхәт ҡыҙы – балалар баҡсаһы рәйесе

*Комиссия ағзалары:*

- Бикбова Светлана Рәшит ҡыҙы – өлкән тәрбиәсе;
- Ғөбәйҙуллина Рәмилә Әбделхәй ҡыҙы

**7. Конкурс критерийҙары:**

7.1. Театр мөйөшөнөң эстетик һәм санитар – гигиеник талаптарға ярашлы булыуы;

7.2. Театр төрҙәренең төрлөлөгө һәм балаларҙың йәш үҙенсәлегенә ярашлы әҙерләнгән булыуы;

7.3. Атрибуттар һәм декорация элементтарының барлығы;

7.4. Театр эшмәкәрлеге өсөн костюмдарҙың төрлөлөгө һәм барлығы;

7.5. Ширма барлығы;

7.6. Картотекалар барлығы (“Бармаҡ уйындары”, “Театр уйындары”, “Ял минуттары” һ.б. )

7.7. Балалар алып уйнарлыҡ урында урынлашыуы.

**8. Еңеүселәрҙе билдәләү**

Еңеүселәр 3 баллы система менән баһалана. 1 – се, 2 – се, 3 – сө урындар билдәләнә. Еңеүселәр маҡтау ҡағыҙҙары менән бүләкләнә. Еңеүселәрҙе билдәләү өсөнсө педсоветта үткәрелә.